## Ата-әсәйҙәр өсөн консультация

# ЮЛ ҠАҒИҘӘЛӘРЕН ӨЙРӘТЕГЕҘ!

Йыл һайын республикала машина аҫтына 500-ҙән ашыу бала эләгә. Ҡыҙҙар һәм малайҙар уларға юлда ниндәй хәүеф-хәтәр янауын аңламай. Шуға күрә ата-әсәләр ғаиләһенә ҡаза килмәһен өсөн, барыһын да эшләргә тейеш. Балаларға юл ҡағиҙәләрен өйрәтегеҙ, уларға төрлө хәл-осраҡта үҙҙәрен нисек тоторға кәрәклеген аңлатығыҙ. Балалар баҡсаһына килгән юлды өйрәнеп, унын хәүефһеҙ урындарын билдәләгеҙ. Артабан балағыҙға тик шул ерҙән генә юлды үтеү мөһимлеген аңлатығыҙ. Уны хәүефте алдан күрә белергә өйрәтегеҙ Балағыҙҙың юл ҡағиҙәләрен ниндәй кимәлдә белеүен һәм үтәүен тикшерегеҙ. Балалар баҡсаһына юлды икәүләшеп өйрәнегеҙ. Балағыҙҙың велосипед тураһындағы хыялын тормошҡа ашырыр алдынан, тәүҙә йәшәгән ерегеҙҙең юл ҡағиҙәләре яғынан хәүефһеҙлегенә иғтибар бирегеҙ. Баланың үҙ урамынан сығып икенсе яҡҡа йүнәлеүе бар. Ә машиналар йөрөгән юлда балалар ғына түгел, ә водитель таныҡлығы булған кешеләр ҙә юғалып ҡала. Үҙегеҙ руль артында саҡта 12 йәше тулмаған баланы махсус автокреслола ғына йөрөтөргә, ә 12 йәштән һуң хәүефһеҙлек ҡайышын эләктерергә кәрәк икәнлеген онотмағыҙ. Каникул мәлендә балағыҙ ҡайҙа ғына ял итһә лә, уға юл ҡағиҙәләре тураһында иҫкәртергә онотмағыҙ. Уларҙы урамда яңғыҙ ҡалдырмағыҙ, машина юлында уйнарға рөхсәт итмәгеҙ. Балағыҙҙы кескәй саҡтан юл ҡағиҙәләрен күҙәтергә өйрәтегеҙ.



MAAM.ru